■ Ислам әҙәбе

# ДИНЕБЕҘ ТАРИХЫН ӨЙРӘНӘЙЕК

Ғабдулла бин Ғаббастан ҡалған бер хәҙистә әйтелә: "Ҡиәмәт көнөндә ирендәре аҫылынып, тештәре ыржайып торған ҡарт бер ҡарсыҡ һүрәтенә индереп, донъяны мәхшәр майҙанына килтерерҙәр.

- Әй, халыҡтар! Һеҙ быны танымайһығыҙмы? - тип фәрештәләр ауаз һалыр.

- Нәғүҙе билләһ - Аллаһ һаҡлаһын! - тиерҙәр кешеләр быны танымауҙары тураһында белдереп.

- Әй, бисаралар! Был - һеҙ һөйгән, һеҙ ололап туя алмаған донъя. Уға ҡарата ҡомһоҙлоҡ күрһәтеп, һеҙ фәҡир- меҫкендәрҙең күңелен күрмәнегеҙ, уларҙы бар тип тә белмәнегеҙ. Шуға динегеҙҙе һаттығыҙ. Ә ул быны шундай сүрәттә, - тиелер һәм:

- Донъяны утҡа атығыҙ! - тип фарман бирелер. Шул саҡта донъя әйтер: "Әй, Раббым! Минең бит үҙемә эйәргән, минем менән бергә йөрөгән дуҫтарым да бар ине. Улар ҡайҙа, - тиер.

- Донъя менән бергә уның дуҫтарын да утҡа атығыҙ! - тип фарман бирелер".

"Аллаһтың үҙ ҡолдарына ҡарата мәрхәмәт-шәфҡәте булараҡ бәндәләргә бирелгән байлыҡ-муллыҡ менән донъя рәхәтлектәре йылмайып-көләп йәшәргә сәбәп булһа ла, - тигән Мәүләнә Джәләлетдин Руми, - уның алтын-көмөштәре ауыҙҙы томалап, аҙашыуға алып барған ҡотҡо. Уйлай белгән кешегә сама сиктәрен белмәгән зиннәттәргә ҡарағанда хәйерселек менән фәҡирлек яҡшыраҡ. Байлыҡ ул йылмайып-көләп кенә бәндәләр алдына ау ҡороп ҡуя ла, йомшаҡ ҡына итеп ҡатыға ултырта йәки түбәнлеккә төшөрә".

"Донъя тормошо ул Беҙҙең ихтыярыбыҙ менән күктән төшөрөлгән ямғыр һыуҙарына оҡшаш, - тип хикәйәт килтерә Ҡөрьән. - Ерҙәге үҫемлектәр унан тереклек һәм көс ала ла, аҙаҡ шул һуттарҙың дымы ла ҡалмай елдә осоп китерлек хәлгә төшөп, ҡороп бөтә. Мал һәм балалар - донъя тормошоноң биҙәге. Әммә ул мәңгелек түгел, мәңге ҡаласаҡ нәмә - ғәмәлдәр. Раббың хозурында улар хәйерлерәк тә, сауаплыраҡ та".

Ундай сауаптарға лайыҡ булыу өсөн иман да, тырышлыҡ та кәрәк.

Бай булыуға ҡаршы түгел дин, байлыҡ менән мауығып артыҡ та ҡомһоҙланып китеүҙе хупламай. Ауыл ерҙәрендә лә



элек урамға сыҡһа, йәйәү йөрөгән кеше - йәйәүлегә, атлап барған - ултырып торғанға, атта барған атлап барғанға сәләм биреп кенә торған. Әле машина күбәйҙе: сәләм биреүсе лә, туҡтап тороусы ла.

"Тормош ул шундай ҡыҙыҡ бер нәмә: бөгөн көләп йәшәргә мөмкинлек бирә, иртәгә илар көнгә төшөрә. Ә бит донъялағы михнәттәрҙең былай ҙа сиге юҡ. Алтын-көмөш ҡолона әйләнеп киткәндәр улар ҡорған ауға эләгеп, михнәттәрен тағы ла арттыра төшә, - тигән Хәрири атлы бер ғалим. - Ер йөҙөндә йәшәгән күпме кешеләр алтын-көмөш ялтырауына алданып аҙғынлыҡҡа, уларҙың үҙҙәренә арҡаһы менән боролдо һәм ҡаты итеп үс алды. Шуның өсөн донъя һине бәләләрҙән ҡотола алмаҫ хәлгә төшөрөп, пыран-заран килтермәһен тиһәң, мәғәнәһеҙгә әйләнмә, һаҡ бул. Шул ваҡытта ғына рухи көс, рухи хазина, рухи аҙыҡ таба алырһың".

"Үҙ ҡолдарын Аллаһ һәр ваҡыт күҙәтеп кенә тора, - тип яҙа Ғабдрахман бин Насир Әс-Сәғди. - Һәр кем нимә өсөндөр яралтып бар ителгән, һәр кемгә Аллаһ үҙе маңлайына яҙып ҡуйылғанға барыу мөмкинлеге бирә. Әгәр ҙә кеше бәхетле, ғәҙел, тәҡүә йәки диндар булыу өсөн яралтылған булһа, Аллаһ уға донъя ләззәттәрен дә бирә, әхирәттә аласаҡ сауаптарынан да мәхрүм итмәй. Әгәр ҙә кеше хәҡикәттә аңламаҫ хәлгә төшөп, гонаһтарға бирелеү өсөн яралтылған икән, Аллаһ уға малы менән ҡәнәғәтлек табыу мөмкинлеге бирә, гонаһтар эшләп йөрөүгә лә ҡамасауламай. Әммә әхирәт өсөн өлөш ҡалдырмай".

Шуның өсөн дә иманлы бәндәләр һәр ваҡыт:

"Әй, Раббыбыҙ! Беҙ һиңә инандыҡ, һинең барлығың - хаҡ. Беҙҙең гонаһтырыбыҙҙы ярлыҡа һәм ут ғазаптарынан һаҡла!" - тип доға ҡылып ҡына тора.

"Аллаһтан ҡурҡа белгәндәргә Ул төрлө хәлдәрҙән сығыу юлын да ризығын да бирер.

Әгәр ҙә кеше үҙенең бөтә эштәрен Аллаһҡа тапшыра белһә, уның хәжәттәрен үтәү өсөн дә Аллаһ үҙе етә".

"Бер ваҡыт бер мәрхүмде ерләүҙә ҡатнашып йөрөгәндә ҡулына кескәй генә таяҡ тотоп алған Пәйғәмбәребеҙ, ғәләйһис-сәләм, беҙҙең эргәбеҙгә килде, - тип хәтерләр булған мөьминдәр әмире Ғәли хәҙрәт. - Башын түбән эйгән хәлдә ул ергә ултырҙы, беҙ уны уратып алдыҡ. Шул ваҡытта таяғы менән тупраҡты тараҡтылап ул: "Һеҙҙең арағыҙҙа йә йәннәттәр йәһәннәмдә урын аласағы, яҙмыштың йә насар, йә яҡшы булыуы алдан уҡ билдәләнеп ҡуйылмаған бер кем дә юҡ", - тип һүҙ башланы.

"Әй, Аллаһ илсеһе! Улай булһа, тәҡдирҙә яҙылғанды көтөп, йәннәт өсөн тип тырышып йөрөүҙәрҙең мәғәнәһе ҡалмай түгелме, маңлайына "бәхетле булыр" тип яҙылғандар - бәхетле, бәхетһеҙҙәр иҫәбенә индерелгәндәр - бәхетһеҙ буласаҡ", - тигәндәр сәхәбәләр.

- Юҡ, - тигән пәйғәмбәр, - бәхетлеләрҙең - бәхеткә, бәхетһеҙҙәрҙең - насарлыҡҡа барыу юлына Аллаһ үҙе еңеллек бирер.

Быға дәлил итеп ул Ҡөрьәндең: "Төрлө кешенең ғәмәлдәре лә төрлө-төрлө: әгәр ҙә берәү Аллаһ бойорғандарҙы үтәп, тәҡүәлеге менән башҡаларҙан айырылып торһа, Аллаһтан ҡурҡып, гонаһтарҙан һаҡланһа, Аллаһтың берлеген, Исламдың, Ҡөрьәндең һәм пәйғәмбәрҙең хаҡлығын таныһа, уны дәлилләп тә торһа, Беҙ уға хозурлыҡ урыны булған йәннәттәргә алып барыусы ғәмәлдәрҙе еңеләйтербеҙ", - тигән аятын уҡый".

Был хөкөмдәрҙе хәтерҙә генә тотоуҙың әһәмиәте бөгөн бигерәк тә мөһимдер. Сөнки үлем менән шаярыуҙар артыҡ та күбәйеп китте шикелле. Үлем тураһында уйланыуҙар бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә.

Ҡөрьәндең беҙ: "Кешеләрҙең Беҙ береһен-береһе үлтерә башлағандары өсөн бәни Исрааил ҡәүеменә: "Әгәр ҙә берәү кеше үлтермәгән, ерҙә боҙоҡлоҡ таратып йөрөмәгән кешене үлтерһә, был уның бөтә кешеләрҙе үлтереүенә тиңләшер; әгәр ҙә берәү бер кешене үлемдән ҡотҡарып ҡалһа, был инде бөтә кешеләрҙе, кешелекте үлемдән ҡотҡарып ҡалған кеүек булыр", - тигән аяттарын онотток.

Был онотоуҙар үҙе лә - гөнаһ.

Дин өйрәтә: "Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө-төрлө итеп яралтҡан, - ти. - Төрлө-төрлө булған хәлдә лә насарлыҡтар саманы үтеп китмәһен, Аллаһы тәғәләнән оялығыҙ. Ризыҡтарығыҙҙы бүлеп биргән кеүек, Ул холҡоғоҙҙо ла бүлеп биргән".

Әгәр ҙә бәндә ниндәйҙер бер насарлыҡҡа барып юлыға икән, Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән уны бәндәләрҙән йәшерә лә белһен һәм тәүбә итһен. Насарлығын йәшерә лә белмәй, тәүбә итмәй йөрөгән кешегә Аллаһ шәриғәт буйынса яҙаһын да бирергә тейеш була.

"Аллаһ - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, - бөтә нәмәлә яҡшы булғанды ярата".

Тормошҡа, ғүмергә ҡарата яҡшы була белгән кешегә ғүмер үҙе лә яҡшы.

"Үҙенең мәрхәмәт-шәфҡәтен Аллаһ йөҙ өләшкә бүлеп, уның туҡһан туғыҙын үҙ хозурына ҡалдыра, бер өләшен генә ергә төшөрә. Ергә төшөргән шул бер өләш Аллаһ яралтып бар иткән бөтә булмыштарҙың бер-береһенә ҡарата мәрхәмәтле булыуы, хатта бер йылҡының тояҡтарын ҡолонона тейҙереүҙән ҡурҡып, аяҡтарын күтәреберәк китеүе өсөн дә етә, - тигән пәйғәмбәр.

Миһырбанлыҡ өлгөләре хәҙистәрҙә аҙ түгел.

"Бер ваҡыт Аллаһ илсеһе хозурына әсиргә алынғандарҙы килтерҙеләр, - тип хәтерләр булған Ғүмер ибн Әл-Хаттаб. - Әсирлектә бала имеҙеүсе бер ҡатын да бар ине. Араларында сабый бала күргән һайын ул уны күкрәгенә алып, имеҙергә тырышып ҡына торҙо. Быны күреп ҡалған пәйғәмбәр шул саҡта "Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: был ҡатын үҙ балаһын утҡа ташлай аламы?" - тип һорап ҡуя. "Юҡ, быны ул бер ваҡытта ла эшләй алмаҫ", - тинек. "Аллаһтың үҙ ҡолдарына ҡарата мәрхәмәте быны ошо ҡатындың сабыйҙарға булған мәрхәмәтенән дә олораҡ", - ти пәйғәмбәр.



# Ҡатын-ҡыҙ ғәмәлдәре

Өйөнә ҡайтып ингәндә пәйғәмбәребеҙ бер ваҡыт ҡатыны Өммө Сәләмнең иртәнге намаҙҙан һуң тәсбих тартып ултырғанын күрә.

- Әй, Өммө Сәләмә! Нимә тип һин намаҙҙы башҡалар менән бергә уҡымайһың? Ниңә йома намаҙына йөрөмәйһең? Ниңә хаж ҡылмайһың? Ниңә джиһадта ҡатнашмайһың? Ниңә Ҡөрьән уҡып ҡына ултырмайһың, - тип әллә күпме һораулар биреп ала.

Пәйғәмбәребеҙ ҡатындарының әҙәбе - бөтә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн өлгө.

- Әй, Аллаһ илсеһе! Былар бөтәһе лә ирҙәр эше, - ти Өммө Сәләмә. Уның һүҙҙәре менән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, үҙе лә килешә: "Әйе, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн, - ти ул, быларҙың бөтәһе лә тиңләшә ала торған ғәмәлдәр бар. Әгәр ҙә ул Аллаһ бойорғандарҙы үтәп, иренә хеҙмәт итә белһә, тәсбих тартҡанға оҡшатып ҡулында орсоҡ әйләндереп торһа, был - Аллаһты ололау, башҡалар менән бергә йома намаҙы уҡыған кеүек була. Әгәр ҙә ул балалары өсөн аш әҙерләп ғәҙәтләнһә, ағастарҙан ҡойолорға ғына торған япраҡтарға оҡшап, уның үҙенең дә ваҡ-төйәк гонаһтары ҡойолоп ҡына торор. Уның сәғәттәр буйы еп иләүе ирҙәрҙең күпер һалыуына тиңләшер. Өс төрлө тауыш - Аллаһ юлында яу сапҡандарҙың уҡ тарткан, уҡтары осҡан тауыштар, ғалимдар яҙып ултырғанда ҡәләмдәр шығырлауы, Аллаһ һаҡлауында булған ҡатындар ҡулындағы орсоҡ тауыштары Аллаһ хозурына етеп кенә торор", - тигән ул.

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.